*Гүзәл ҒӘЛИЕВА*

# ”Һөйөү” тигән изге утта яныу...”

## Бишенсе стихия

Бар донъяны ялмағанда
Һөйөүеңдең янғыны,
Мин инем бит — асмандарға
Бейеп менгән ялҡының.

Азат рухың дауыл булып
Елгәндә ер өңтөнән,
Минең йәнем өйөрөлдө
Һинең ҡойон эсендә.

Тирбәлдек икәү һиллектә
Һалдарға салҡан ятып,
Донъяны һағыштарыңдың
Туфаны киткәс баҫып.

Тетрәткәндә һатлыҡ йәне
Күңел баҫҡан кешеңдең,
Тауҙан ауған ҡая кеүек
Минең йәнем ишелде.

...Тандырайҙы инде утым,
Сабырланды йәндәрем,
Фәйләсуфтарса үткәрәм
Күңел тетрәр мәлдәрем.

Һағыштарым да ҡайттылар
”Сама” тигән ярҙарға.
Һине генә ваҡыт алмай,
Һин ярһыуһың һаман да.

Хистәрҙән тетрәп-күкрәйһең,
Үҫмер рухың юғалтмай,
Зиһенең саҡҡан саҡмалар
Йәшендәр булып ялтлай.
Даланың емештәренән
Яҡтыра күпме күңел!
Киләсәккә сәсә орлоҡ,
Ҡоромай торған ул түл.
Ҡараташтай ҡайғы баҫһа,
Ҡаратауҙай тынаһың,
Янғантауҙай эстәреңдән
Сығармайһың тын ”аһ”ың.

Кем һуң һин?
Ғәреш хужаһы
Ниндәй рух һиңә биргән?
Утмы? Һыумы? Ер? Һауамы?
Ни матдәнән һинең йән?

Күктәрҙән яуап ишетәм:
— Ул — бер юлы дүртеһе лә,
Өҫтәгәнмен тағы нур.
Ул — бишенсе стихия.
Исеме уның — шағир!

## Учалы балы

Күҙемде алалмай торам,
Бағып һары гәлсәргә —
Ҡояшты уйып килтереп
Һалғандармы кәсәгә?

Гүйә, балдаҡ соҡорона —
Кәсәгә уйылған да,
Юҡ, был, ахыры —
шыйыҡ алтын,
Алтынлы тупраҡта үҫкән
Сәскәнән йыйылғанға!

Уның ҡояшлы татында
Ирегән кеүек булам,
Илаһи ҙа ләззәтенән
Мин кәрәҙ булып тулам!

Ҡара һағыштар үтә,
Донъя яҡтырып китә.
Хатта йәнде дауалай бит!
Был ”дарыу”ға ни етә?!

## *Күңелең һинең кактус сәскәһеләй*

Күңелең һинең кактус сәскәһеләй,
Матурлығы менән эй арбай ҙа!..
Бындай балҡыш, бындай
сихырҙы мин
Күргәнем юҡ ине һис бер ҡайҙа.

Үҙе яҡын, үҙе алыҫ кеүек,
Барам-барам, етә алғаным юҡ.
Эй, Хоҙайым, күпме кәртә юлда,
Рухым, баҙап ҡына ҡалма, берүк!

Өмөтһөҙлөк, ҡом бархаы
булып,
Юлым быуа, бата аяҡтарым,
Өмөт өҫтәй күктән йәнле монар
Вәғәҙә итеп алда низәр барын.

Икеләнеүем, сүл ҡояшы булып,
Ваз кистермәк мине ниәтемдән,
Эй, көйҙөрә, һыуһыҙ интектерә,
Сиктерергә теләп ғәйрәтемдән.

Ыулы ғәйбәт саян булып саға,
Ышанысты емерә башлай ағыу...
Тик ағыуҙы ҡырҡа минең
дарыу —
"Һөйөү" тигән изге утта яныу.

Ул ут-сәскә үҫкән оазисты
Ете башлы дейеү һаҡлай,
имеш...
Дейеүҙәрҙе алдар хәйләм дә юҡ,
Тик барыбер алға барам, еңмеш.

Ғүмерем буйы, ахыры, етә
алмам
Мине арбап торған шул
ут-наҙға...
Тик барыбер туҡтар ниәтем юҡ,
Ял итәм дә бына тик бер аҙға...

## *Достоевский менән бәхәс*

Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр.
*Ф.Достоевский*

Ниндәй замана был?
Имәнес бит!
Алла хәҙер — энә һәм шешә.
Матурлыҡтың көлөп өҫтәренән,
Яһанылар унан фәхишә.

Изгелектең хәҙер абруйы юҡ,
Хас яуызлыҡ итә тантана.
Кешеләрҙең күңел тәхетенә
Ихахайлап иблис атлана.

Намыҫ ҡаса күңел төптәренә,
Ҡалҡһа — көтә йәлләд балтаһы,
Намыҫһыҙлыҡ байлыҡ, власть
өсөн
Сығарып һата ғәзиз атаһын.

Һәр заманда булған кеүек
Моцарт,
Һәр заманда булған Сальери,
Бөгөн Сальериҙың бүләләре —
Ҡан көҫәгән шакал өйөрө.

Бабалары, далан булмаһа ла,
Тырыш булған, булған эшһөйәр,
Былары бит, талантлыны талап,
Тик болғаҡлыҡ менән көн һөрә.

Федор Михайлович!
Бөйөк аҡыл!
Заманыбыҙ нисек ҡотайыр?!

Матурлыҡ та уны ҡотҡаралмай,
Изгелек тә уны ҡотҡаралмай,
Намыҫлылыҡ уны ҡотҡаралмай
Һәм талант та уны ҡотҡаралмай.

Донъяны тик иман ҡотҡарыр!